**Ҡәҙерле уҡыусылар!**

Башҡорт теле буйынса Аҡмулла олимпиадаһының был турында текст буйынса тест тәҡдим ителә. Бирелгән тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Уның жанр, стиль үҙенсәлектәренә, лексикаһына, автор ҡулланған тасуирлау сараларына, телмәр фигураларына иғтибар итегеҙ. Һүҙлектән таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Тик шунан һуң ғына тесты эшләргә тотонорға мөмкин.

Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ!

**Текст**

(1)Үҙәккә үтерлек һалҡын ел тәбиғәттең шыҡһыҙлығын арттыра ғына төштө. (2)Аяҡ аҫтында лайлаланып ятҡан былай ҙа күтерле ер, дымға туйынып, лыстырлап ята башланы. (3)Ара-тирә ҙур-ҙур күләүектәр, үткеһеҙ батҡыллыҡтар барлыҡҡа килде.

(4)Түмгәкле арауыҡта күрән менән аралаш үҫкән томбойоҡ япраҡтары һаран яҡтылыҡта күҙгә салына. (5)Улар ҙа ямғырға ебегән, сынаяҡ аҫтын хәтерләткән ҙур таждары аҫҡа эйелгән. (6)Ошонда уҡ әрһеҙ ҡамыш, бер-береһенә ышҡылып, ҡыштырлай. (7)Иртәнсәк ҡояш ҡалҡҡанда, кис ҡояш байығанда яҫы, оҙон япраҡтар яр буйында ялтырап күренеүсән. (8)Йәнә лә ҡояшҡа тартылып был донъяға яралған, исемдәрен дә ҡапыл ғына белеп бөтөргә мөмкин булмаған йөҙ төрлө үҫемлектәр ергә һарылған.

(9)Ваҡыт-ваҡыт түмгәктәр төбөнән субырлап ҡыуыҡтар күтәрелә. (10)Күп тә үтмәй яҙмышынан уңған бейәләй ҙурлыҡ тәлмәрйендәр, ҡамыш төбөндә йоҡомһораған еренән тертләп уянып, ирәйеп кенә бер-ике һикереп ҡуя. (11)Ямғыр һыуының сирҡандырғыс һалҡынлығы уларға ләззәт бирә. (12)Түмгәккә яңылыш ҡына бәрелеп түңкәрелеп китһәләр ҙә кире әйләнергә ашығып бармайҙар, айғолаҡтарын ҡабарта-ҡабарта, аҡһыл-һары ҡорһаҡтарын төн йөҙөнә иреп ята бирәләр.

(13)Ерек ағастары сәсеп үҫтергәндәге һымаҡ теҙелешеп киткәндәр. (14) Улар ҙа, ауыр уйҙарға сумып, шымып ҡалған. (15) Тик береһенең генә олонона ҡағыл, хәҙер үк юғарынан тыптырлап һанһыҙ эре, тос тамсылар ҡойолор. (16) Ҡоштар ҙа көнө буйы сырыҡ-сырыҡ килеп талсығып, ағастарҙы ел шыйлата башлағанды һиҙеп, тиҙерәк ышыҡҡа ҡасыуҙы хәйерлерәк тапҡан. (17) Тик яҡындараҡ яңғыҙ өкө генә, һаңғырау урманды һиҫкәндереп, ауыр уһылдап ҡуя.

(Д. Бүләков)